Тема: 2015 йыл – әҙәбиәт йылы.

Маҡсат:

- Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда иғлан ителгән 2015 йыл – әҙәбиәт йылын асыу.
- Әҙәбиәт йылына үҙ проекттарығыҙҙы тәҡдим итеү.
- Әҙәбиәткә, китапҡа һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: презентациялар, китаптар, гәзит-журналдар.

Хәйерле көн уҡыусылар,
Тип йылмайҙы ҡояш та,
Яңы ғына тыуған йылдың
Үткәрҙек бер айын да.

Беҙ яңы ғына тыуған 2015 йылды ҡаршы алып, байрам саралары менән һөйөндөк.

Ә, һәр яңы йыл үҙ исеме менән дә билдәле.

Шулай итеп, быйылғы 2015-се йыл Башҡортостан республикаһында ниндәй йыл тип иғлан ителде инде?

2015-се йыл – әҙәбиәт йылы.

Ә, үткән 2014-се йыл ниндәй йыл булғайны?
Әлбиттә, мәҙәниәт йылынан һуң әҙәбиәт йылы килеүе көн кеүек асыҡ (билдәле), тип уйлайым мин.
– Ни өсөн мәҙәниәт йылынан һуң әҙәбиәт йылы тип иғлан ителде икән?

- Ижадты талап итә.
- Айырылғыһыҙ.
- Оҡшаш.

- Тимәк, уҡыусылар беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?
2015-се йыл – әҙәбиәт йылы.

- Ә хәҙер дәфтәрҙәрҙе асып бөгөнгө числоны һәм теманы яҙып ҡуйығыҙ.
    - 2015-се йыл Башҡортостан Республикаһында, Рәсәй Федерацияһындағы кеүек, Әҙәбиәт йылы тип иғлан ителде.
    - (Маҡсат) әҙәбиәт йылының маҡсаты – йәмғиәттең иғтибарын әҙәбиәткә һәм китап уҡыуға йәлеп итеү.

МАҠСАТ:

Һәм уҡыусылар, беҙҙә бөгөнгө дәрестә ошо маҡсаттан ситкә тайпылмай, ә киреһенсә был һүҙҙәрҙе бурыс итеп алырға тейешбеҙ.

- (уҡыусылар дәрескә маҡсат ҡуялар)
- Шулай уҡ, бөгөн беҙ һеҙҙең менән дәрестә ижади проект өҫтөндә эшләйәсәкбеҙ.

- Ә уҡыусылар һеҙ үҙегеҙ быйылғы йыл, әҙәбиәт йылы икәнен ҡайҙан белдегеҙ?

- Телевизорҙан, яңылыҡтарҙан.
- Урамдағы баннерҙарҙан
- Гәзиттән
- Атайым менән әсәйемдән
- Уҡытыусыларҙан.

Афариндар, тимәк һеҙ телевизорҙағы яңылыҡтар, гәзит-журналдар менән дусһығыҙ, артабан да шулай иғтибарлы булығыҙ, мәғлүмәтле булыу бер ваҡытта ла ҡамасауламай.

- Яңы тыуған йылдың исемен билдәләгәс, был йылға нимә кәрәк була әле? (Эмблема)
- Быйылғы йылдың эмблемаһы менән һеҙ танышһығыҙмы? ( сладта ЭМБЛЕМА)

Әҙәбиәт йылы башланыр алдынан, мәҙәниәт министирлығы республика халҡына конкурс иғлан иткән. Конкурсҡа рәссамдарҙан, ябай кешеләрҙән, балаларҙан 114 эш килгән. Бөгөнгө көндә эмблеманың иң яҡшы конкурсы проекты билдәләнгән: ул рәссам, “Рампа” журналының баш мөхәррире Игорь Тонконогий. Уҡыусылар ҡарағыҙ әле, эмблемаға нимә төшөрөлгән, һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Эмблеманың төп элементы – ҡаҙ ҡаурыйы, ҡаурыйҙың өҫкө өлөшө Пегас йәки Аҡбуҙат рәүешендә, ҡаурый өҫтөндә ҡаурый сәскәһе төшөрөлгән. Эмблеманың аҫҡы өлөшөндә башҡортса һәм русса 2015 әҙәбиәт йылы тип яҙылған.

- Бик матур эмблема эйеме?
- Матур ғына ла түгел, эстәлекле икән.
- Шулай итеп: ҡурай көйө кеүек оҙон, мәңге йәшәр, илһамлы, аҡбуҙат кеүек – тыныс, изге күңелле төрлө телдәлә китап уҡырға әҙәбиәтте белергә тейешбеҙ.

Шулай итеп, эмблеманың төп өлөшөн нимә алып тора?

Ә ни өсөн ҡаурый тип уйлайһығыҙ?

Уҡытыусы: Әҙәбиәт – сикһеҙ ғаләм кеүек,
Һәм әйләнә унда төрлө ҡояш
Һәр бер есем үҙ ҡояшын таба,

Унын яктылығын, нурын тойғас.
Салауат Әбүзәр

Әҙәбиәт йылы башланғыс та Өфө урамдарында башҡорт һәм урыҫ классиктарының ижад һәм китап хаҡындағы фәһемле фекерҙәре яҙылған баннерҙар барлыҡҡа килде.

- Ә ниндәй яҙыуҙар улар, иҫегеҙҙә ҡалдымы?
- Бына шул яҙыуҙарҙы күргәс, уҡыусылар һеҙ ниндәй уйҙарға бирелдегеҙ?
- Эйе, уларҙы күреү менән күңелде шул тиклем ҙур ҡыуаныс һәм оло ғорурлыҡ тойғоһо биләп ала. (слайдта бирелгән баннерҙарҙы уҡыйҙар)

Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһында халҡыбыҙҙың күренекле әҙиптәренең башҡорт телендә яҙылған һүҙҙәрен уҡыу, һүрәттәрен күреү беҙҙең башҡорт илендә йәшәүебеҙҙе күрһәтә, урыҫ телендәге яҙыуҙар Рәсәй менән бергә дуҫлыҡта, татыулыҡта, берҙәмлектә ғүмер итеүебеҙҙең билдәһен сағылдыра.

- Был яҙыуҙар әҙәбиәт йылына старт бирелеүҙең үҙенсәлекле символы ла булып тора. Яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың “ҡанатлы һүҙҙәре” реклама таҡталарын рухи аҙыҡ менән тулыландыра.
 Ғайса Хөсәйеновтың “ӘҘӘБИӘТ – ЗАМАН ТАУЫШЫ” - тигән һүҙҙәре иҫкә төшә. Был бик дөрөҫ һәм быйылғы йылға тура килешле юлдар улар.
-Ә билдәле шағир Ирек Кинйәбулатовтың да быйылғы йылға арнап яҙылған шиғыры бар.
Ул “Әҙәбиәт йылы” тип атала.

(Бер нисә уҡыусыбыҙ шиғри юлдарҙы яттан һөйләп ишеттерә)

ӘҘӘБИӘТ ЙЫЛЫ

Башҡортостан һәр йыл мәҙәниәт,
Әҙәбиәт иле булһын, тип,
Теләйек беҙ, әҙәбиәт йылын

Шәп әҫәрҙәр менән тулһын, тип.

Бөгөн Урал батыр һәм Салауат
Исемдәрен телгә алдым да,
Күрәһеләр килә  тағы күптәр
Балҡыһын, тип, донъя алдында.

Аҡмулла һәм Бабич иле булып,
Инде ерем күптән танылған.
Дәүләтшинә, Биишевалар бит
Хоҙай әмеренән табылған.

Мостай менән Назар иле бклып,
Башҡорт һүҙе тағы балҡыны.
Күңелдәрҙе күпме яҡтырталар
Рәми менән Рауил ялҡыны.

Әҙәбиәт – Әҙәмиәт иле –
Булып ҡалһын өсөн илебеҙ,
Донъя алдарында ғәмәл кәрәк
Ҡеүәтләнһен өсөн телебеҙ.

Дүрт күҙ менән көткән һәм, ниһәйәт,
Был йыл – китап йылы, һүҙ йылы.
Хатта бик оҙаҡҡа көттөрһә лә,
Әҙиптәрҙең килде үҙ йылы.

Күпме хайуандарҙың, йәнлектәрҙең
Әлмисаҡтан бар бит йылдары.
Кеше, Әҙәм йылы нишләп юк һуң,
Кем оноткан юллау юлдарын?

Бына бәхет – Әҙәбиәт йылы!
Әҙәбиәт йәшә, Кеше, тип!
Кешеләрҙе асыу, күтәреү ҙә –
Бары уның иң төп эше, тип.

Әҙәбиәт – Әҙәмиәт фәне,
Кеше фәне, кеше асылы.

Йыл, бир ҡеүәт! Кеше сере.рухы
Китһен өсөн тотош асылып.

Яҙыусы ул – кеше өйрәнеүсе,
Яҙыусы ул – кеше ғалимы.
Улар бер ваҡытта тынмаһындар,
Бөтмәгәндә ерҙең залимы.

Башҡортостан һәр йыл мәҙәниәт,
Әҙәбиәт иле булһын. тип,
Йәшәйек беҙ, әҙәбиәт йылы
Шәп әҫәрҙәр менән тулһын, тип!

Афариндар! Шиғыр юлдарында әйтелгәнсә “Был йыл китап йылы, һүҙ йылы” һәм беҙ ошо һүҙҙәргә тоғро ҡалып, әҙәбиәт йылын намыҫлы үткәрергә тейешбеҙ!

- Уның өсөн иң мөһиме нимә эшләр кәрәк? (китап уҡырға)
- Ә һеҙ китап уҡырға яратаһығыҙмы?
- Китапхнаға йөрөйһөгөҙмө?
- Ниндәй китапхаларҙа булғанығыҙ бар?
- Әлбиттә, китап уҡыр кәрәк, китапты яратыр кәрәк. Сөнки ул беҙҙе нимәгә өйрәтә?
- Китап уҡыуҙың ниндәй ыңғай яҡтары бар?(Хәтер, тел шымара, әҙәби геройға оҡшау, автор)

  РЕКЛАМА.

  Бер-берегеҙгә тыуған көндәрегеҙгәме, байрамдарғамы КИТАП бүләк итһәгеҙ тағы ла яҡшыраҡ булыр ине.

  Әлбиттә, китап уҡыр кәрәк.

  Шуға ла халыҡ та бер мәҡәл бар.

  Күп уҡыған – күп белер.

- Уҡыусылар, ә һеҙ ҡалабыҙҙа ниндәй китап магазиндарын беләһегеҙ? (Планета, Знание, Эдвис, Читай город  һ.б.)
- Ә ниндәй нәшриәттәр беләһегеҙ?(Китап)
- Ә башҡорт китап магазиндары телгә алындымы ул?
- Әммә, ошо китап магазиндарында башҡорт бүләктәре бар, башҡорт китаптары бик үк күп булмаһа ла табырға мөмкин.

Уҡыусылар “Йәншишмә” гәзите лә быйылғы йылға арнап ошондай конкурс иғлан итә. (Йәншишмә уҡыу)

Ҡәҙерле балалар беҙҙең әҙиптәребеҙҙең китаптары бик күп, уларҙың үҙҙәрен һәм әҫәрҙәрен өйрәнеп ошо конкурста ҡатнашыу, әлбиттә тик яҡшыға ғына булыр ине.

“Ер рухы” картинаһы

Был шәхестәр әҙәбиәт аша тарихты ла, телде лә, әҙәбиәтте лә сағылдырғандар.

Уҡыусылар һеҙ башҡорт халҡының ниндәй яҙыусыларын, шағирҙарын беләһегеҙ? Әйҙәгеҙ исемдәрен әйтеп үтегеҙ.

(Уҡытыусы М. Кәримдең “Коштар осорам” шиғырын башҡорт һәм рус телендә яттан һөйләү)

- Уҡыусылар беҙ беребеҙҙә ғәмһеҙ кешеләр түгелбеҙ. Ә киреһенсә тырыш, аҡыллы уҡыусыларбыҙ. Бына бөгөнгө дәрестә лә һеҙ әҙәбиәт йылы тураһында уйланып ултырҙығыҙ. Һәр беребеҙҙең берәй теләге, хыялы барлыҡҡа килгәндер.
- Әйҙәгеҙ хәҙер төркөмдәргә бүленеп, 2015 йыл бағышлап ижади проекттар төҙөп ҡарайыҡ әле.
  (5-7 мин)
- Һеҙ әҙәбиәт йылын нисек үткәрер инегеҙ?
- Әҙәбиәт өлкәһендә ниндәй үҙгәрештәр булдырыр инегеҙ?
  (Уҡыусылар проек эштәрен төҙөй, талғын көй ҡуйыла)
  Проекттар яҡлау.
  - Афариндар. Һеҙҙең был уйҙарығыҙ, үҙ тырышлығығыҙ менән тормошҡа ашырығыҙ. Һеҙең уйҙарығыҙ изге, эштәрегшеҙ маҡсатлы.

Уҡыусылар, беҙҙең кластан тыш асыҡ дәресебеҙҙең бөгөн үтеүе, тағы ла бер сараға бәйле. Сөнки бөгөн Баш ҡаланың ҡала мәҙәниәт һарайында әҙәбиәт йылын рәсми рәүештә асыу тантанаһы ойошторола. Беҙҙә, 2015 йыл – әҙәбиәт йылын класта асыҡ тип иғлан итеп, Башҡортостан гимнын йырлап дәресебеҙҙе тамамлайыҡ.

Һәм әлбиттә әҙәбиәткә тоғро ҡалыуыбыҙҙы белдерәйек! Күп китап уҡыясағыбыҙға ант итәйек.